# Олотау хәбәрҙәре

Ишмырҙа мәктәбенең балалар һәм үсмерҙәр гәзите

№ 7

Март,

2019 йыл




## 8 март

## ` Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнө!



*Минең әсәйем.*

***Әсәй-ниндәй йылы һәм ағымлы һүҙ. Ер йөҙөндә һәр кешенең дә үҙ әсәһе бар. Әсәйҙәр беҙгә ғүмер биргәндәр. Минең дә иң-иң ҡәҙерле әсәйем бар. Ул беҙгә, һигеҙ балаға ғүмер биргән. Әсәйебеҙ беҙҙе бик нык ярата. Ул һәр ваҡыт беҙҙе ҡурсалап,һаҡлап тора. Әсәйем минең алсаҡ һәм ағымлы. Ул беҙҙе төрлө-төрлө тәмле аштары менән һыйлай. Бик күп тәмлекәстәр бешерә.беҙгә дәрес әҙерләгән ваҡытта ярҙам итә. Мин дә әсәйемә ҡулымдан килгәнсе ярҙам итергә тырышам. Әсәйем үҙ эше менән булған ваҡытта бәләкәс ҡустыларымды ҡарайым,өй эштәрендә ярҙам итәм. Мин әсәйемде бик нык яратам.***

**Игебаев Морат 2-се класс уҡыусыһы**

## Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы

**Мәктәп уҡыусылары йыл башында асылған “Һыбай йөрөү” түңәрәгендә ихлас шөғөлләнәләр Әйтергә кәрәк, түңәрәк айына ике тапҡыр үткәрелә.**

**Урындағы инициативаларҙы хуплау программаһында(ППМИ-2019) мәктәбебеҙ ихлас ҡушылды. Уҡыусылар ошо сараға бағышланған видеояҙма эшләне.**

**Башҡортостан Республикаһының ойошторолоуына йөҙ йыл тулыу айҡанлы, Ишмырҙа мәктәбендә тантаналы йыйын үтте.**

**Март айында мәктәптә ата-әсәләр йыйылышы булып үтте. 5 көнлөк уҡыуға күсеү, уҡыу планына үҙгәрештәр индереү хаҡында һүҙ алып барылды.**

**Ошо көндәрҙә яҡташ рәссамыбыҙ Теүәлев Зәбир Фәрит улы менән осрашыу булып үтте.**

**8-се класс уҡыусыһы Ишмырҙин Айгиз «КРИТ-2019» муниципаль конкурсында еңеүсе тип билдәләнде.**

**Айҙың аҙағында Баймаҡ ҡалаһынан килгән логопед менән осрашыу үтте.**

**Ауылыбыҙҙа Театр йылына арналған округтар араһында спектаклдәр ҡуйыу дауам итә. Уҡыусыларыбыҙ һәр спектаклдә актив ҡатнашып торалар.**

**Башҡа яңылыҡтарҙы мәктәптең https://ishmurzino.02edu.ru/school/ сайтында ҡарай алаһығыҙ.**

**Шунда уҡ:** Ишмырҙа ТВ

## Шаулап-гөрләп Ҡатын-ҡыҙҙарҙың спартакиадаһы үтте!

4-5-се биттәр

## Әлифба байрамы

1-се класс уҡыусыларының ҙур байрамы үтте. Улар яҡын дуҫы – Әлифба китабы менән хушлашып, беренсе еңеүҙәрен байрам иттеләр. Байрамға әкиәт геройҙары, ата-әсәләр, ҡунаҡтар килгәйне.




Дауамы 3-сө биттә...





# Шаулап-гөрләп Ҡатын-ҡыҙҙарҙың спартакиадаһы үтте!..

Ишмырҙа ауылы биләмәһе ир-егеттәр ҡоро менән берлектә етенсе марттан ун алтынсы мартҡа тиклем ауылыбыҙҙа ҡатын-ҡыҙҙар спартакиадаһы уҙғарҙы. Спартакиаданың маҡсаты булып: ҡатын-ҡыҙҙарҙың ижади һәләтен үҫтереү, мәҙәниәтле ял итеү, сәләмәт тормошто пропагандалау булды. Ауылыбыҙҙың төрлө урамдарында йәшәүсе ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ ихлас күңелдән ҡатнашырға теләк белдереп, "Йәгеҙ-әле, ҡыҙҙар!"спорт бәйгеһенә 7 команда йыйылды, ярыш Башҡортостан Республикаһының ойошторолоуының йөҙ йыллығына ла бағышланды. Мәктәптең спорт залы шау – гөр килә, халыҡтың кәйефе күтәренке, күңелдәре көр.



Сара командалар менән танышыуҙан, күңелле сәләмләүҙән башланды. Бәйге бик сәмле, ҡыҙыу барҙы. Ярышта ҡатнашыусы ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ йырланылар, бейенеләр, интермедия күрһәттеләр, үҙҙәренә бирелгән төрлө мәсьәләләрҙе систеләр, арҡан тартышып көс тә һынаштылар, ҡаҙау ҙа ҡаҡтылар; йәғни тамашасыларға һәм үҙҙәренә лә ысын байрам ойошторҙолар.

Спорт бәйгеһе флешмоб, командаларҙы бүләкләү һәм иҫтәлеккә фото төшөү менән тамамланды. Ярыш барыһына ла оҡшаны, тамашасылар ҙа, ҡатнашыусылар ҙа, онотолмаҫлыҡ тәьҫораттар менән өйҙәренә таралышты. Спартакиада барышында командалар үҙ көстәрен һынап, баскетбол, волейбол, шашки уйындары ла әүҙем ҡатнаштылар. Һәр ярыш байрам төҫөн алды.




Спартакиаданың иң аҙаҡҡы сараһы булып –“Тышта саф һауа – әйҙә, уйнарға!” конкурсы булды. Һәр команда ҡышты оҙатыу сараһына өҫтәл әҙерләп бизәне. Ихлас әйҙәләүҙәр менән һыңар саңғыла йүгереү, сәкән һуғыу, таҡмаҡ әйтешеү, ҡаршылыҡлы эстафеталар кеүек ярыштар үтте.

Бәйгеләрҙең һөҙөмтәләре буйынса 1-се урынды “Картаямы һуң, йөрәк!” (30 мәрәй) командаһы яуланы, 2-се урынды “Ишмырҙа” һәм “Бал ҡорттары” командалары (29 мәрәй ) бүлеште, 3-сө урында “Йүкәләр” (27 мәрәй) командаһы, 4-се урында “Супер әсәйҙәр” командаһы (26 мәрәй ), 5-се урында “Непоседы” командаһы (25 мәрәй ), 6-сы урынға “Таң нурҙары” командаһы (15 мәрәй) лайыҡ булды. Барыһына ла маҡтау ҡағыҙҙары, иҫтәлеккә бүләктәр тапшырылды. Афарин!

Махсус бит!..




Байрам күтәренке кәйеф һәм рух менән тамамланды. Бит остары алһыуланған, күҙҙәре янып торған, ирендәренән йылмайыу китмәгән ҡатын-ҡыҙҙар саф һауала ял итеп кенә ҡалманы, сәләмәтлеген нығытты, үҙ – ара менән аралашты. Һәр саҡ шулай берҙәм, татыу булайыҡ.




Әйткәндәй, байрам ауыл халҡына бик оҡшаны. Рәхмәт һүҙҙәрен ауыл хакимиәте башлығы - Ҡашкаров Заһит Мәүлетдин улына, хаҡлы ялда булыуына ҡарамаҫтан тиҫтәләрсә йыл уҡыусыларға спортҡа һөйөү тәрбиәләгән Йәйләев Заһит Зәки улына, бағымсылар - Рәсүлев Радик Ғәйнислам улына, Әфләтүнов Марсель Әхмәт улына, Тотманов Рауил Рәмил улына һәм ойоштороусылар – мәктәп директоры Монасипов Иҙел Мөхтәр улына, Үҙәкина Гөлгинә Мирғәле ҡыҙына, Салихов Рәмил Йәнозаҡ улына, Фәйзуллин Азамат Сәлих улына, Солтанов Надир Морат улына еткерәбеҙ. Еңел булмаған эшегеҙҙә уңыштар, ғаилә именлеге, күңел тыныслығы, һаулыҡ теләп ҡалабыҙ!

**Махсус битте башланғыс класс уҡытыусыһы Хажиәхмәтова Гөлфиә Нотфулла ҡыҙы әҙерләште**



